МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

*Сығарылыш иртәлеге:*

# "Күңелле баласаҡ!"

**Сығарылыш кисәһе.**

Зал байрамса биҙәлгән.

**1 –се алып барыусы:**

Ете диңгеҙ арьяғында түгел,
Түгел алыҫ илдәрҙә
Хатта бейек тауҙа түгел….

Ә ябай ғына кешеләр араһында баҡсасылар йәшәгән, һәм уларҙың баҡсаһы ла булған. Был баҡса ябай булмаған.

**2 –се алып барыусы:(** һыу ҡойғос тотоп инә, балаларҙы урап үтә., уларға һыу ҡойған кеүек йөрөй һәм һүҙ башлай)

Беҙҙең матур баҡсабыҙҙа
Үҫмәй емеш – еләктәр
Үҫмәй унда сәскәләр,
Өлгөрҙө унда малайҙар
Үҙәре бик шаяндар.
Өлгөрҙө матур ҡыҙҙар,
Үҙҙәре шцундай наҙҙар.
Серле ағас үҫкәндәй.
Сәскә ата кескәйҙәр.

(Балалар араһына ултыра, уларҙың баштарынан һыйпай)



**1 –се алып барыусы:**

Бына һиңә баҡса! Аптырарлыҡ - эсе тулы балалар! Баҡсасылар үҙҙәренең балаларын бик яраткандар, көн һайын уларға һыу һипкәндәр, йыуындырғандар,ашатҡандар,өйрәткәндәр,тышта саф һауала ла йөрөткәндәр.

**2 –се алып барыусы:**

Көндәр, айҙар үтә торған, ә кескәйҙәр һаман үҫкән дә үҫкән… Ҙур булып үҫеп еткәндәр – бына ошолай.(Балалар торалар)

***Шиғырҙар.(Динә,Б.Искәндәр,Иҙел,Ах.Искәндәр)***

***Йыр "Хушлашыу"***

***(Күңелле йәшәнек бергә…)***

**А.б. 1:** Хәйерле көн килгән ҡунаҡтар!

**А.б. 2:** Хәйерле көн әсәйҙәр һәм атайҙар!

**А.б.1:** Бөгөн беҙҙә бик тантаналы ,бик шатлыҡлы ,шулай уҡ саҡ ҡына моңһоу көн,сөнки бөгөн сығарылыш байрамы.

**А.б 2:** Бөгөн был матур яҡты залда балалар һуңғы тапҡыр йыйыла.Балалар беҙҙең менән хушлаша ,мәктәпкә беренсе класҡа йыйыналар.

**А.б:** Бөгөн байрам барыбыҙ өсөн
Хушлашыу мәле етте.
Һеҙгә уҡыусы булырға ,
Ваҡыт та килеп етте.
**Алып барыусы**
Бөгөн беҙең байрамда
Бик күңелле буласаҡ.
“Тылсым яланына” һеҙҙе
Саҡыра бит баласаҡ.

**Алып барыусы:**Балалар,килгән ҡунаҡтар беҙгә мәктәпкә барыр өсөн тылсымлы ҡумта кәрәк,уның эсендә белем иленә асҡыс булыр.Белем асҡысы һеҙгә белем серҙәрен асырға,өйрәнергә,һеҙгә уҡырға ярҙам итәсәк.Әйҙәгеҙ бергәләп Белем батшабикәһен саҡырайыҡ.Бының өсөн тылсымлы һүҙҙәр әйтәйек.(Тылсымлы һүҙҙәр әйтә)

***Балалар бергә***:Унды- фунды- чунды- тайҡ
Бала саҡҡа ҡайтайыҡ.



***Ишек шаҡыйҙар.***

**Алып барыусы:** Байрам көндө кем ишек шаҡып йөрөй икән?
**Филя:** (ишек артынан ҡысҡыра): Был мин- Филя. Мине белмәгән бер бала юҡ.
**Киля**:Тағы ла мин-Киля
**Алып барыусы:** Улайһа ишек артында шау сығарып тормағыҙ инегеҙ бында байрамға.

***Күңелле көй ишетелә,залға ике клоун йүгереп инәләр.***

**Филя:** Киля ҡара әле беҙ ниндәй әкиәткә эләктек?
**Алып барыусы:** Һеҙ әкиәткә түгел,ә балалар баҡсаһына сығарылыш кисәһенә килеп индегеҙ. Бөгөн беҙҙең балаларыбыҙ балалар баҡсаһы менән хушлашып мәктәпкә барырға йыйына.Бының өсөн балаларға белем иленең асҡысын табырға кәрәк.һеҙҙе әллә Белем Батшабикәһе ебәрҙеме?
**Киля:** Юҡ инде,беҙ үҙебеҙ килеп сыҡтыҡ.Бына мин әйтәм юҡҡа китергә йыйынаһығыҙ. Беҙ быңдай ерҙән бер ҡайҙа ла китмәҫ инек,әйеме Филя.Бына бит ниндәй матур, яҡты, күңелле, серәкәйҙәр ҙә борсомай, хатта себен дә осмай! Ә һеҙҙе бынан ҡыуалар. Мин һеҙҙе йәлләй башланым әле.
**Алып барыусы:** Һеҙ бер нәмә лә аңламайһығыҙ. Беҙ балаларҙы ҡыумайбыҙ. Улар ҙур булып үҫтеләр, хәҙер улар мәктәптәрҙә белем алырға китәләр.
**Филя:** Ҡыҙыҡ! Мәктәпкә! Унда бит дәрестәр әҙерләргә кәрәк. Бында рәхәтләнеп уйнап йөрөп була.

**Алып барыусы:** Һин Филя дөрөҫ уйламайһың. Балаларҙың үҙҙәрен тыңла әле, улар нисек уйлай икән.
**Балалар** (бер- бер артлы):
-Уҡыу белем нигеҙе,
- Уҡыу иң ҙур байлыҡ,
-Уҡыған белер, уҡымаған – бөлөр,
- Уҡыу һәр ерҙә кәрәк.
**Киля:** Барыбер! Бер кәрәге лә юҡ.
**Алып барыусы:**Һеҙҙең бына ниндәй һөнәрҙәрегеҙ бар?
**Филя:** Мин ни күп нәмә беләм: йырлайым ла, бейейем дә, хатта балалайкала ла уйнай беләм. (Көй аҫтында һикерәңләп бейеп китә).
**Алып барыусы:** Бик шаян күренәһегеҙ, беҙгә һинең менән күңелле булып китте әле. Беҙҙең дә бейегеләр килеп китте. Әйҙәгеҙ балалар бергәләшеп бейеп алайыҡ.



***Парлы бейеү "Дуҫлыҡ"***
**Киля:** Ә һеҙҙең балаларығыҙ мәктәпкә һуңлап йөрөмәҫме? Иртә торорға, портфелдәрҙе йыйырға,ашап та өлгөрөргә кәрәк. Балаларҙың иртәнсәк йоҡларға ратканын беләм мин, үҙем дә йоҡларға ратам.
**Филя:** Ә спорт яғынан һеҙ нисек. Бик бәләкәй күренәһегеҙ, ауырыуҙан бушамайһығыҙҙыр?
**Алып барыусы:** Беҙҙең балаларҙың физкультура дәрестәрендә нисек шөғөлләнгәнен белер өсөн улар менән күнегеү яһап алығыҙ булмаһа.



**Филя**:Беҙ булдырабыҙ уны эйеме Киля.
***Спорт күнегеүҙәре күрһәтелә***
**Алып барыусы:** Киля бына һин һанай беләһеңме? Икене өскә ҡушһаң нисә була?
**Киля:** (Аптырап башын һыйпай) Алты тирәһе була. Балалар дөрөҫмө?
**Балалар**: Юҡ!
**Филя:** Аптырағандар икән. Бер тапҡыр яңылышырға ла ярамаймы ни? Үҙегеҙ һанай беләһегеҙме һуң, шәп булып

ултыраһығыҙ ҙа ул.
**Алып барыусы:** Беҙҙең балалар бөтә нәмәне лә беләләр..
**Киля:** Ә ата-әсәләренең математик яҡтан белемдәре , нисегерәк икән? Әйҙә тикшереп ҡарайыҡ әле балаларымы, әллә ата-әсәләре шәберәк һанаймы икән?
***Уйын "Һандар менән уйнайбыҙ"*** *(Ике команда:әсәйҙәр һәм балалар,уларға һандар таратып бирелә,көй аҫтында улар түңәрәктә бейейҙәр,көй туҡтаһа һандар бер-бер артлы теҙелеп торорға тейештәр)*



**Филя:** Ярай, һеҙҙең менән бик күңелле лә ул,тик һеҙгә ярҙам итмәйенсә булмаç,беҙ хәҙер һеҙгә Белем Батшабикәһен ебәрербеҙ,көтәләр тип әйтербеҙ. *(Сығалар)*
**А.б:** Беҙ байрамыбыҙҙы дауам итәйек, бөгөн һеҙҙең иң иҫтәлекле көнөгөҙ,белем баҫҡысының беренсе үренә баҫаһығыҙ,мәктәптә лә үҙегеҙҙе тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтерһегеҙ тип ышанып ҡалабыҙ.



***Шиғырҙар(А.Регина,Алина,Арслан)***
***Йыр "Прощальная"***
***Бейеү "Беләҙегем-йөҙөгөм"***

***Йыр "Маленькая страна"***
*(Көй аҫтында Маша менән айыу килә́ләр)*
**Маша:** Ҡайһылай көн матур,ҡояш йылмая.Айыу ҡара әле...Дөрөҫ килдекме икән?Беҙҙе Белем Батшабикәһе дөрөҫ ебәрҙеме икән?
**А.б:**Маша әйҙә рәхим ит бөгөн беҙҙә ҙур байрам сығарылыш кисәһе,беҙҙең балалар тиҙҙән мәктәпкә барасаҡтар.Эйе ысынлап та беҙ Белем Батшабикәһен көтәбеҙ.Унһыҙ беҙ мәктәпкә бара алмайбыҙ,белем асҡысы кәрәк.



**Маша**: Ухти, ҡайһылай шәп!Буласаҡ уҡыусылар...Тәк-тәк-тәк, улайһа әйҙәгеҙ уйнап алайыҡ мин уҡытыусы булам ә һеҙ уҡыусылар.*(указкаһын ала,ҡыңғырау*

*шылтырата)*Айыуҡай ултыр балалар эргәһенә ҡурҡма ярҙам итеп ултырырһың.Математика дәресен башлайбыҙ!Мин мәсьәлә уҡыйым иғтибар менән тыңлағыҙ, шунан ғына яуап бирерһегеҙ,килештекме?

***Уйын “Мәсьәләләр”.***

**Маша:**Минең икемашинам бар,
Ә Мараттыҡы өсәү.
Икәү бергәуйнағас,
Беҙҙең машинанисәү?

Ултыра әле Ишбирҙе,
Эскәмйәлә бер үҙе.
Йүгереп килде Ильдар,
Улар нисәүбулдылар.



Малайбишбалыҡ тота,
Береһенбеҙгә һата.
Үҙендә күпме ҡала,
Йә әле уйлап ҡара.

**Маша**: Афарин,балалар.

**А.б:**Балалар әйҙәгеҙ Маша менән айыуға үҙебеҙҙең дәртле бейеүебеҙҙе бейеп күрһәтәйек.

***Рокен-рол***

**Маша**: Ҡайһылай һеҙ шәпһегеҙ!Айыуҡай миңә портфель кәрәк ине,минең дә мәктәпкә барғым килә.*(айыу портфель бирә)*

**А.б:** Маша бында һиндә бик күп кәрәкмәгән нәмәләр.*(портфельде асып)*Бәлки беҙҙең балалар һиңә ярҙам итерҙәр?

**Маша:** Уйнап алайыҡ һуң булмаһа.



***Уйын “Портфельде йыйˮ***

**Маша**: Афарин балалар.Хәҙер белдем инде тәк-тәк-тәк,мин ҡайтым айыуҡай менән портфель йыя торайым,һеҙгә Белем Батшабикәһе бына-бына килеп тә етер,беҙ уға һеҙ мәктәпкә әҙер тип әйтербеҙ,әйҙә айыуҡай ҡайтайыҡ,рәхмәт һеҙгә балалар,һаубулығыҙ*!!!(сығалар)*

***Йыр “Тәрбиәсемә”***

*(Белем Батшабикәһе инә.)*

**А.б:** Бик оҙаҡ көттөк һине,ҡайҙарҙа һин йөрөнең?

**Белем Батшабикәһе**: Барлыҡ балалар баҡсаларында хушлашыу кисәһе үткәрелә,бына мин дә һеҙҙе оло юлға,Белем иленә оҙатырға тип ашҡынып килеп еттем.Һеҙ шул тиклем уңған,аҡыллы,тырыш балалар икәнһегеҙ,балалар баҡсаһында кеүек үк мәктәптә лә үҙегеҙҙе матур тәртипле тотоуығыҙға ышанам.
**А.б:**Белем Батшабикәһе балалар матур йырҙар шат бейеүҙәр әҙерләнеләр,һиңә лә үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәтерҙәр.

***Шиғырҙар(Морат,Аяз,Радмир,Камилла)***
***Йыр "Школьная полька"***
***Бейеү "Егеттәр"***



**Белем Батшабикәһе:**Һай Афарин,балалар.Бына минең тылсымлы ҡумтам,тик ҡумта асылһын өсөн бер үтенесем бар минең һеҙгә,әгәр ҙә ошо хәрефтәрҙән дөрөҫ итеп һүҙ төҙөп яҙһағыҙ,ҡумта асылыр.Бының өсөн миңә ике бала кәрәк булыр.
***Уйын "Аҡыллы бейәләйҙәр"***(Ике команда,һәр командаға дүрт бала саҡырыла,бейәләйҙәргә хәрефтәр беркетелгән,улар бейәләйҙәрҙе сисмәйенсә хәрефтәрҙән һүҙ төҙөйҙәр.)
**А.б:** Ҡарағыҙ әле беҙҙең ҡумта асылды.Рәхмәт һиңә Батшабикә.Балалар һеҙгә хәҙер белем тауҙарына юл асыҡ.




**Белем Батшабикәһе:** Ысынлап та балалар һеҙ бөтә һынауҙарҙы ла уңышлы үтеп Белем иленә асҡысты таптығыҙ.Мин асҡысты һеҙгә тапшырам,тырышып уҡығыҙ,балалар баҡсаһында апайҙарҙы тыңлаған кеүек мәктәптә лә аҡыллы булығыҙ,Белем тауына тырыштар һәм етеҙҙәр генә менә.Аҡ юл һеҙгә.*(Асҡысты тапшыра)*

*Белем Батшабикәһе сыға.*
**Алып барыусы:**
Мәктәпкә оҙатабыҙ

без бөгөн балаларҙы
Һуңғы вальс бейергә
Саҡырабыҙ уларҙы.




***Хушлашыу вальсы.***

**Алып барыусы:** Бына инде хушлашыу минуттары ла килеп етте,алда һеҙҙе күңелле ҡыҙыҡлы мәктәп йылдары көтә.Һеҙгә киләсәктә теләктәрҙең иң изгеһен генә теләйбеҙ.Ә инде беҙҙең ошо балалар баҡсаһында эшләгән апайҙарға оло рәхмәт белдерәбеҙ.

***Шиғырҙар(Байрас,Артур,Айҙилә)***

***Йыр”Апайыма аҡ сәскәләр”***

***Сәскәләр биреү.***

***Йыр «Һау бул балалар баҡсаһы»***



**Алып барыусы:** Балаларҙы ҡотлау өсөн баҡсаһы мөдире Иҙрисова Р.Ғ. һүҙ бирелә.Ата-әсәйҙәргә һүҙ бирелә.

**А.б.2:** Баҡса менән хушлаштығыҙ,
Беренселәр инде беҙ.
Аҡ юлдар һеҙгә теләйбеҙ,
Һау-сәләмәт булығыҙ!

*(Теләктәр теләп шар осоралар).*